БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ МУНИЦИПАЛЬ РАЙОН БОРАЙ РАЙОНЫ
МУНИЦИПАЛЬ БЮДЖЕТ ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
ҠАЙЫНЛЫҠ УРТА ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ МӘКТӘБЕ

Килешелгән
уҡытыу-тәрбиә эштәре буйынса
директор урынбаҫары
_______ Ғарипова Г.З.
«30 » август 2023 й.

Раҫлайым
мәктәп директоры
_______ Йоҙләкәев Р.Н
«30» август 2023 й.
Бойороҡ № 80

**5-9 класстар өсөн**

**башҡорт (дәүләт) теленән**

**календарь-тематик планлаштырыу**

**Төҙөүсеһе: башҡорт теле уҡытыусыһы**

**Мәксүтова Зөлфиә Миҙхәт ҡыҙы**

2023– 2024 уҡыу йылы

**1.Уҡытыу һөҙөмтөләренә талаптар.**

**Шәхси үҫеш кимәле**

(мәктәп уҡыусыларының башҡорт теленән төп программаны үҙләштәреүе)

-Башҡортостан Республикаһында башҡорт теле дәүләт теле булыуын аңлау;

-башҡорт телен өйрәнеүҙең эшмәкәрлек һәм профессиональ эшмәкәрлектә кәрәкле булыуын аңлау;

-башҡорт телен ғәмәлдә ҡулланыуға әҙерлек;

-үҙ-ара аралашыуҙа толерантлык булдырыу;

-башҡорт теленең башҡорт мәҙәниәте менән танышыу сараһы булыуын аңлау.

**Метопредмет кимәле**

( рус телле мәктәптәрҙә башҡорт телен өйрәнеү)

-телдән һәм яҙма хәбәр ителгән мәғлүмәттәр адекват ҡабул итеү;

-тыңланған һәм уҡылған тексты бирелгән эш төрҙәре ( план,йөкмәткеһен һөйләү,конспект)менән яңынан һөйләй белеү;

- аралашыу сфераһы һәм шартына ҡарап,телмәреңде һәм яҙма телмәреңде төҙөй белеү,әңгәмә,фекер алышыу,дискуссияла ҡатнашыу;

- үҙ аллы белем ала белеү,төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарын,интернет ресурстарын,ваҡытлы матбуғат баҫмалары менән эшләй белеү,белешмә әҙәбиәт менән ҡулланыу;

- тәғәйен темаға материалды һайлап ала һәм системаға килтереү ысулдарын үҙләштереү,үҙ ҡарашыңды анализлай,сағыштыра,күрһәтә,һығымта яһай,йомғаҡлай,нигеҙләй белеү.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

1) телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел һәм халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнештәре тураһында, туған телдең кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;

2) гуманитар фәндәр системаһында туған телдең урынын һәм мәғарифта тулыһынса уның ролен аңлау;

3) туған тел тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңлау;

4) тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистика (тел ғилеме) һәм уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары, фәнни, публицистик, рәсми-эшлекле стилдәр, матур әҙәбиәт теле; функциональ-мәғәнәүи телмәр төрҙәре (хикәйәләү, һүрәтләү, фекерйөрөтөү); текст, текст төрҙәре; телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләре һәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү;

5) башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;

6) телдең төп берәмектәрен, грамматик категорияларын анализлау һәм таныу, тел берәмектәрен аралашыу шарттарына ярашлы ҡулланыу;

7) һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен (фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), һөйләм һәм һүҙ бәйләнешкә синтаксик анализ, төп билдә һәм структура күҙлегенән сығып, күп аспектлы анализ яһау;

8) тел-һүрәтләү саралары һәм уларҙы уҡыусы телмәрендә ҡулланыу;

9) туған телдең эстетик функцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.

**5 класс**

**Шәхси һөҙөмтәләр**

Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелек сифаттарын тәрбиәләү. Уны үҙ аллы үҫешкә, камиллашыу оҫталығына өйрәтеү. Һөҙөмтәлә уҡымышлы, үҙ еренең, иленең, халҡының ҡиммәттәренә төшөнгән, уны һанлаған һәм һаҡлаған, яҡлаған итеп формалаштырыуға нигеҙ һалыу.

Был йүнәлештә 5-се класс уҡыусыһына уҡыуҙың һәм белем алыуҙың мөһимлеген аңлатырға. Китап уҡырға ғәҙәтләнеү, ҡыҙыҡһыныу теләген булдырыу; үҙ-үҙеңде һәм тормошто аңлауҙы сығанаҡ итеп ҡабул итеү, тарихи-мәҙәни ваҡиғаларҙы, кешелек ҡиммәттәре менән әҙәбиәттәге айырым сәнғәт төрө икәнен белеү; әҙәби әҫәрҙе тулыһынса һәм эмоциональ ҡабул итеү, үҙ фекереңде булдырыуға һәм әңгәмәсенекен хөрмәт итеү талаптарына яуап биреү.

**Метопредмет һөҙөмтәләре.**

Универсаль эш төрҙәрен өйрәтеү: танып белеү, регулятив һәм коммуникатив эшмәкәрлек, йәғни баланы үҙ аллы уҡыуға, белем алырға өйрәтеү.

Предмет-ара һөҙөмтәләр түбәндәге талаптарҙан тора:

-үҙеңдең фекереңде, уйыңды әңгәмәсеңә еткерә алыу;

-тирә-йүн, тәбиғәт менән гормонияла йәшәү ҡағиҙәләрен, ысулдарын үҙләштереү;

-йәмәғәттәге тәртип һәм әхлаҡ ҡағиҙәләрен белеү;

**Предмет һөҙөмтәләре.**

Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны анализлау һәм ҡулланыу өлкәһендә тейешле тәжрибә туплау.

Предметты өйрәнеүҙеңһөҙөмтәләре түбәндәгеләр:

-компитентлы уҡыуҙыформалаштырыу;

-уҡыу техникаһын үҙләштереү;

-уҡылған йәки тыңлаған әҫәрҙе аңлау алымдарына эйә булыу;

-һүҙлектәр, белешмәләр менән эш итеү;

-үҙеңде ижади эшмәкәрлеккәһәләтле,белемле китап уҡыусы итеп тойоу;

-монологтар төҙөү, текстың йөкмәткеһен план буйынса һөйләү;

-шиғырҙарҙы яттан һөйләү һәм таныш булмаған аудиторияла сығыш яһау күнекмәләренә эйә булыу.

**6 класс**

**Шәхси һөҙөмтәләр:**

1. Үҙ милләтен,Ватанын, тыуған яғын яратыу;

2. Этник һәм милли сағылышын таныу: үҙаллылыҡҡа, белем алыуға етди һәм яуаплы ҡарау; мәктәп һәм кабинет йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл ҡарау; атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булырға;

3. Ғаилә һәм йәмғиәт ҡиммәттәрен ихтирам итеү, үҙ аллы эшләү һәм үҙ эштәренә яуап бирергә әҙер булыу;

4. Ҡыҙыҡһыныусан, әүҙем булыу һәм донъяны танып белеүгә ынтылыу;

5. Динамик үҙгәреүсән һәм үҫтерешле донъяла үҙенең социаль ролен аңлау;

6. Әхлаҡ, социаль ғәҙеллек һәм ирек хаҡындағы ҡараштар нигеҙендә үҙ аллы үҫешкә һәләтле булыу;

7. Һәр саҡ этик тойғолар, ихтирамлылыҡ һәм эмоциональ – әхлаҡ һәм икенсе кешеләрҙең тойғоларын уртаҡлаша алыу;

**Метапредмет һөҙөмтәләре:**

1. Уҡыу күнекмәләре нигеҙҙәрен белеү, үҙенең эшмәкәрлеген ойоштороорға һәләтле булыу;

2. Үҙенең уҡыу эшмәкәрлегенең нигеҙҙәрен проектлау, баһаларға һәләтле булыу, уңышҡа өлгәшеүҙең эффектив юлдарын билдәләй белеү;

3. Үҙенең йәш мөмкинлектәренән сығып компьютер грамоталылығына эйә булыу, кәрәкле мәғлүмәт йыйыу, анализлау, эшкәртеү маҡсатында Интернетҡа сыға белеү,тексты баҫыу, уны төҙәтә һәм техник эшкәртә белеү;

4. Аңлы уҡыу күнекмәләрен үҙләштереү, төрлө стиль һәм жанрҙағы текстарҙы үҙ аллы уҡый белеү, текстың төп фекерен билдәләү, йөкмәткеһен еткерә алыу, уның буйынса һорауҙарға яуап биреү;
5. Сағыштырыу, анализ, синтез, дөйөмләштереү кеүек логик эшмәкәрлеккә эйә булыу, оҡшаш сифаттары буйынса классификациялау, сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен һәм оҡшашлыҡты булдырыу;

**Предмет һөҙөмтәләре:**

1. Башҡорт теле Башҡортостандың, рус теле Рәсәй Федерацияһының дәүләт һәм аралашыу теле булараҡ мәғәнәһен аңлау;
2. Телмәр этикетына, аралашыуҙа төрлө тасуири тел сараларына эйә булыу;
3. Уҡыуҙың төрлө төрҙәрен файҙаланыу: танышыу, өйрәнеү, һайлап, эҙләп, аңлы рәүештә ҡабул итеү һәм текстарҙың йөкмәткеһен аңлап, геройҙарҙың эшенә, ҡылығына әхлаҡи баһа биреү;
4. Уҡыу компонентына, үҫешкән телмәр оҫталығына эйә булыу, йәғни ҡысҡырып уҡыу һәм үҙ аллы уҡыу техникаһына анализдың элементар әҙәбиәт төшөнсәләр менән художестволы, фәнни- популяр һәм уҡыу текстарын үҙгәртеп ҡора белеү;

**7 класс**

**Шәхсиһөҙөмтәләр:**

1.Башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли -мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау,интеллектуаль,ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә башҡорт теленең ролен,уның мәктәптә белем алыу процессындағы әһәмиәтен билдәләү;
2.Башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау,башҡорт теленә ҡарата ихтирам,һөйөү,уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү;
3.Аралашыу процессында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙеңдең иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү;үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәләрен булдырыу.

**Метапредмет һөҙөмтәләре:**

Функциональ грамоталылыҡтың мөһим индекаторы- предмет-ара статус:коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге (телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәре менән эш итеү,тыңдаштәре һәм оло кешеләр менән аралашыуҙы ҡороу;телдән һәм яҙма телмәрҙе адекват ҡабул итеү;ҡуйылған проблема буйынса үҙ ҡарашыңды теүәл,дөрөҫ,логик яҡтан төҙөк һәм тасуири әйтеп биреү,аралашыу процессында яҙма һәм һөйләү телмәре нормаларын һәм башҡорт телмәр этикаһын һаҡлау);
Танып белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге(рпобleмаңы аныҡлау,дөрөҫ аргументлай белеү.логик яҡтан төҙөк фекер йөрөтөү,иҫбатлау табыу,раҫлаусы йә кире ҡағыусы тезис килтереү;
Библиографик эҙләнеүҙе тормошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәтте алыу,төп һәм өҫтәмә мәғлүмәтте билдәләү,уҡыу маҡтсатын асыҡлау,аралашыу маҡсатынан сығып уҡыу төрөн һайлау;мәғлүмәти-компьютер сараларын ҡулланыу; мәғлүмәтте системаға килтереү һәм киренән эшкәртеү һәм уны төрлө ысулдар менән күрһәтеү һ.б.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

1.Телдең төп функциялары тураһында,башҡорт теленең Башҡортостан республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында,тел һәм  халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнештәре тураһында,телдең кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;
2.Гуманитар фәндәр системаһында башҡорт теленең урынын һәм мәғарифта тулыһынса уның ролен аңлау.
3.Башҡорт теле тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү.

**8 класс**

**Шәхсиһөҙөмтәләр:**

1.Башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли -мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау,интеллектуаль,ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә башҡорт теленең ролен,уның мәктәптә белем алыу процессындағы әһәмиәтен билдәләү;

2.Башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау,башҡорт теленә ҡарата ихтирам,һөйөү,уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү;

3.Аралашыу процессында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙеңдең иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү;үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәләрен булдырыу.

**Метапредмет һөҙөмтәләре:**

Телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү (аудирование һәм уҡыу);планлаштырыу;һөйләү һәм яҙыу,дәрестә эш барышын һөйләп аңлатып барыу;уҡытыусы тәҡдим иткән план буйынса эшләү,коллектив төҙөлгән план буйынса эшләү,тикшереү,төҙәтмәләр индереү,дәреслектең,һүҙлектәрҙең,белешмәләрҙеңайышына төшөнөү;дәреслектән,текстан,таблицаларҙан,схемаларҙан һорауға яуап табыу,күмәкләп йәки үҙ аллы башҡарған эш буйынса һығымта яһай белеү,ҙур булмаған текстың йөкмәткеһен һөйләү.

**Предмет һөҙөмтәләре:**

1.Башҡорт теленең кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;

2. Башҡорт теле тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү.

3.Тел ғилеменең төп аңлатмаларын үҙләштереү;

4. Башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын,башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын,һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү.

## 2.Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе:

### 5 класс

**Һаумы, мәктәп! (4 сәғәт)**

Был тема (1 сентябрь – Белем көнө.Мәктәп, уҡыу, белем алыу, тел өйрәнеү) башлыса “Көҙ” темаһы менән бергә үрелеп бара. Был темаларға ҡағылышлы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр иҫкә төшөрөлә, һүҙлек запасын байытыу.Башҡорт теленең өн-хәрефтәре, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Исем. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше. Һөйләмдә һүҙ тәртибе. Сифат.

**Үҙем тураһында (5 сәғәт)**

Был теманы үҙләштереү барышында уҡыусы үҙе тураһында,үҙенең ғаилә ағзалары, яҡындары тураһында һөйләргә өйрәнергә тейеш. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Алмаш. Зат алмаштары. Зат алмаштарының килеш менән үҙгәреше. к-г,ҡ-ғ тартынҡыларының сиратлашыуы.

**Йыл миҙгелдәре (4 сәғәт)**

Йыл миҙгелдәре менән танышыу. Йыл миҙгелдәрен, һәр миҙгелгә ҡараған ай исемдәрен дөрөҫ әйтә белеү. Һорау алмаштары.Күрһәтеү алмаштары. Күрһәтеү алмаштарының килеш менән үҙгәреше. Билдәһеҙлек алмаштары. Билдәләү алмаштары.

**Башҡортостанды беләһеңме? (4 сәғәт)**

Уҡыусыларҙы үҙҙәре йәшәгән республиканың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән таныштырыу. Уҡыусы аңына үҙе йәшәгән ерҙең – Башҡортостандың тарихы, уның байлығы, күренекле шәхестәре. хаҡында бер бөтөн тыуҙырыу һәм ул турала һөйләй белеүҙәренә өлгәшеү. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Юҡлыҡ алмаштары.

**Кеше. Тән ағзалары.шәхси гигиена. (2 сәғәт)**

Был тема кешенең тән ағзалары, эске органдарының атамаларын белеү менән бергә шәхси гигиена, көн тәртибе, һаулығы менән берлектә алып барыла. Кешегә һау-сәләмәт булыу өсөн нимә эшләргә кәрәклеге тураһында әңгәмәләр үткәреү, әҫәрҙәр уҡыу. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. Ҡылым.

**Яңы йыл менән! (2 сәғәт)**

Яңы йыл темаһы ҡыш темаһы менән берлектә алып барыла. Ҡыш миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү, Яңы йыл менән туғандарҙы, яҡын кешеләрҙе ҡотларға өйрәтеү, һәр байрамдың үҙенә генә хас күренештәре тураһында һөйләтеү. Ҡылымдың зат һәм һан менән үҙгәреше.

**Аҙыҡ-түлек.Кейем-һалым. Өй . Магазин. (2 сәғәт)**

Аҙыҡ-түлек, кейем-һалым атамаларын өйрәнеү, һатып алыу этикеты менән таныштырыу, һөйләшергә, аралашырға өйрәтеү. Синоним.

**8 март – Ҡатын-ҡыҙҙар көнө. (3 сәғәт)**

Әсәй тураһында шиғыр, хикәйәләр уҡыу. Әсәйҙең донъяла иң ҡәҙерле кеше икәнен, уны ихтирам итергә, яратырға, ҡәҙерләргә кәрәклекте аңлатыу. Был тема ғаилә темаһы менән берлектә бара, шуның өсөн алдағы кластарҙа үтелгән ғаилә темаһы ҡабатлана. Ҡотлау открыткалары яҙырға, ҡотлау һүҙҙәрен әйтә белергә өйрәтеү. Антоним.

**Яҙ етте. ( 3 сәғәт)**

Яҙ билдәләрен күрә һәм яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәрен әйтә белергә өйрәтеү. 1 май, 9 май байрамдары, дуҫлыҡ тураһында һөйләшеү. Омоним.

**Яҙғы эштәр ( 2 сәғәт)**

Яҙғы эштәр, яҙғы баҡса эштәре,баҫыу эштәре тураһында һөйләшеү. Һан. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

Яҙғы байрамдар.

**Йәйҙе ҡаршылайбыҙ (3 сәғәт)**

Башҡорт халҡының, Башҡортостанда йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың йәйге тәбиғәт менән бәйле ғөрөф-ғәҙәттәре һәм матур йолалары тураһында һүҙ алып барыла. Уҡыусыларға уларҙың кеше тормошондағы әһәмиәте, мәғәнәләрен, уларҙы тергеҙеү кәрәклеген еткереү. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе:**
**6 класс**

**I.Беҙҙең мәктәп (5 сәғәт).**

1 сентябрь- Белем көнө. Уҡыусыларҙың хеҙмәт көндәре башланыуы. Белем, тел тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү. Грамматика буйынса 1-5-се кластарҙа үткәндәрҙе ҡабатлау.

**II.Башҡортостан ере буйлап (8 сәғәт).**

Башҡортостан Республикаһы, унның тарихы, күренекле шәхестәре, байлыҡтары менән танышыу. Тема буйынса һөйләү телмәрен үҫтереү, ижади эштәр башҡарыу. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. Сифат. Сифат дәрәжәләре. Синоним. Антоним. Омоним.

**III.Дуҫлыҡҡәҙерен бел (3 сәғәт).**

Ысын дуҫлыҡтың ҙур мәғәнәгә эйә булыуы,уны һаҡлай белеү.Дуҫлыҡ хаҡында әҫәрҙәр уҡыу,мәҡәлдәр табыу. Ҡылымдың шарт һөйкәлеше.

**IV.Ҡыш дауам итә (8 сәғәт)**

Ҡыш миҙгеленең үҙенсәлектәре.Текстар уҡыу,шиғырҙар,һынамыштар ятлау,һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү,һүҙ байлығын арттырыу.Ҡылымдың хәбәр һөйкәлеше.Үткән заман. Киләсәк заман.

**V.Яҙ килә,яҙ! (6 сәғәт).**

Яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәре. Яҙғы тәбиғәтте күҙәтеү.Осоп килеүсе ҡоштар тураһында һөйләшеү.1 май,9май байрамдары.Грамматика буйынса 6-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

Йәйге тәбиғәт, уҡыусыларҙың йәйге ялы тураһында әңгәмә. Тема буйынсатекстаруҡыу,шиғырҙарятлау. Тәбиғәткә экскурсия ойоштороу. Грамматика буйынсаүтелгәндәрҙеҡабатлау, нығытыу

**VI.Йәмле йәй килә (4сәғәт)**

Йәй миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Уҡыусыларҙың һүҙ байлығын арттырыу, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү. Тәбиғәтте күҙәтеү, алған тәьҫораттар буйынса фекер алышыу. Был айҙарҙа уҙғарылған Милли байрамдар менән таныштырыу, улар тураһында белгәндәрен һөйләү. Балаларҙың йәйге ялы, хеҙмәте, ололарға ярҙамы тураһында әҫәрҙәр уҡыу һәм әңгәмәләр үткәреү.

## Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе:
## 7 класс

**I. Яңынан мәктәпкә (3сәғәт)**

5-6-сы кластарҙа алған белемдәрҙе тулыландырыу. Был тема буйынса яҙыусылар, шағирҙар ижады менән таныштырыу, яңы текстар уҡыу. Диалог һәм монолог ярҙамында бәйләнешле һөйләм төҙөү дауам итә. Туған тел, белем, уҡытыусы, мәктәп һәм көҙгө байлыҡ тураһында һөйләшеү күберәк урын ала. Бәйләнешле текст төҙөү, бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү күнегеүҙәре башҡарыла. Көҙ, көҙгө эштәр, уңыш йыйыу темаһы төп урындарҙың береһен алып тора.

Мәктәп, уҡыу, китап, икмәк, уңыш, емеш-еләк тураһында мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар менән танышыу.

Грамматика:

6-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**II. Ауыл тормошо (4сәғәт)**

Ауыл тормошо, ауыл кешеләренең көнкүреше, хеҙмәт, игенсе хеҙмәте тураһында әңгәмәләр үткәреү. Игенсе эшенең нескәлектәрен һөйләү. Ауыл тормошоноң ҡала тормошонан айырмалы яҡтары тураһында аңлатыу. Ауыл еренән сыҡҡан күренекле шәхестәрҙең тормош юлы менән таныштырыу, осрашыуҙар ойоштороу. Был тема буйынса яҙылған әҫәрҙәр уҡыу.

Грамматика:

Ҡылым.һүҙбәйләнеш.һөйләм төҙөлөшө.

**III. Башкортостан буйлап сәйәхәт (4сәғәт)**

Башҡортостан тураһында 1-6 кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлап, белгән фактик материалды эҙмә-эҙлекле итеп һөйләргә өйрәнеү. Был тема буйынса уҡыусыларға яңы мәғлүмәт биреү. Тыуған еребеҙҙең сал тарихы барлығын, Башҡортостан тураһында рус яҙыусылары, «Урал» эпосы, һуңғы йылдарҙағытарихи Башҡортостан ерендә үткәрелгән фәнни экспедициялар мәғлүмәттәре менән таныштырып китеү («Арҡайым», «Сынташты», боронғо ҡалалар, алтын әйберҙәр табыу һ.б. тураһында), бының өсөн һуңғы йылдарҙа сыҡҡан матбуғат баҫмаларына мөрәжәғәт итеү. Был тема буйынса тәҡдим ителгән әҫәрҙәр менән танышыу, уҡыусыларҙың яҙыу һәм һөйләү телмәрен үҫтереү өҫтөндә эш алып барыла.

Грамматика:

Яңғыҙлыҡ исемдәр.

**IV. Спорт. Спорт кәрәк-ярактары (5сәғәт)**

Кешегә сәләмәт булыу өсөн спорт менән шөғөлләнергә кәрәк икәнлеген аңлатыу һәм был турала уҡыусылар менән һөйләшеү, әңгәмә ойоштороу. Уҡыусылар үҙҙәре спорт менән ҡыҙыҡһыныуҙары, күренекле спортсмендар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Спорт тураһында теле-радио тапшырыуҙары, газета материалдары буйынса һөйләү.

Башкортостанда спорт төрҙәре. Спорт өлкәһендә данлыҡлы кешеләр.

Грамматика:

Башҡорт теленең үҙенсәлекле хәреф, өндәре, һөйләм төрҙәре.

**V. Мин һәм беҙҙең ғаилә (5сәғәт)**

Уҡыусы үҙенең ғаиләһе тураһында тулы һәм иркен һөйләй белергә тейеш. Сөнки был тема йылдан-йыл ҡабатлана. Ғаилә ағзаларын дөрөҫ атау, уларға ихтирамлы, иғтибарлы булырға өйрәтеү. Ғаилә, ғаилә ағзалары тураһында яҙылған әҫәрҙәр укыу, уларҙы аңлы ҡабул итергә өйрәтеү, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү. Уҡылған әҫәрҙәр буйынса план төҙөргә өйрәтеү, план буйынса һөйләү. Телмәр үҫтереүгә айырым иғтибар бирелә. Был бүлектә билдәле рәссамдарҙың әҫәрҙәре күп кенә урын алған. Картинаны ҡарай, аңлай һәм уның йөкмәткеһен һөйләргә өйрәтеү.Әсәй, өләсәйҙәрҙең изгелеге, ҡәҙере хаҡында әҫәрҙәр укыу, йөкмәткеһе өҫтөндә эш төрҙәре башҡарыу, һүҙлек байлыҡтарын арттырыу. "Катын-ҡыҙҙар байрамы тураһында әңгәмәләр, иртәлектәр үткәреү, данлыҡлы ҡатын-кыҙҙар менән осрашыуҙар ойоштороу.

Грамматика:Ҡылым. Ҡылымдарҙың заман, зат, һан менән үҙгәреше.Теркәүес тураһында төшөнсә. Теҙеү теркәүестәре.

**VI. Сәнғәт оҫталары. (3сәғәт)**

Республиканың данлыҡлы һәм арҙаҡлы шәхестәре менән танышыуҙы дауам итеү. Сәнғәт оҫталарының тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу. Теле-радио тапшырыуҙар, яҙмалар ҡарау. Уларҙың әҫәрҙәрен таныу, данлыҡлы кешеләребеҙ тураһында һөйләй белеү. Йырҙар өйрәтеү, бергәләп йырлау, һәләтле балалар менән йырҙар өйрәнеү. Мәктәп сәхнәһе өсөн концерт номерҙары әҙерләү.

Грамматика:

Эйәртеү теркәүестәре. Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Теркәүес темаһын нығытыу.

**VII. Исемең матур, кемдәр ҡушкан? Исемдәрҙә - ил тарихы (2 сәғәт)**

Был тема кеше исемдәренән башҡа тау, ер, һыу атамалары мөнән берлектә алып барыла. Исемдәрҙең мәғәнәһе, уның кеше холоҡ-фиғеленә тәьҫир итеүе. Данлыҡлы кешеләрҙең исемдәренә бәйләп, төрлө тарихи ваҡиғалар һөйләү, әҫәрҙәр укыу. Атамалар буйынса легендалар, риүәйәттәр укыу ҙа дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс итеп үткәрергә ярҙам итәсәк.

«Исемдәрҙә – ил тарихы», «Исемең матур, кемдәр ҡушҡан?» темаһына иртәлектәр үткәреү, укыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтерергә, кеше алдында сығыш яһау өсөн ярҙам итәсәк.

Грамматика: Бәйләүестәр. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәһен ҡабатлау.

**VIII. Борон-борон заманда... (2сәғәт)**

Башҡорт халыҡ ижады темаһын киңәйтеү, укыусыларҙың белгәндәрен тулыландырыу, һүҙ байлығын, һөйләү телмәрен үҫтереү маҡсат булып тора. Күберәк иғтибарҙы тексты аңлы ҡабул итеү һәм йөкмәткеһен һөйләй белеүгә йүнәлтеү. Бында башҡорт халыҡ әкиәттәренән башҡа, Ф.Туғыҙбаеваның «Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?» әкиәте лә урын алған. Уларҙың айырмаһын билдәләп үтеү кәрәк.

Грамматика:

Киҫәксә тураһында төшөнсә.Киҫәксәләрҙең бүленеше. Киҫәксәләрҙең дөрөҫ яҙылышы.

**IX. Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ (3сәғәт)**

Иң төп темаларҙың береһе - берҙәмлек, дуслык, тыныслыҡ. Бында тик кешеләр араһындағы дуҫлыҡ тураһында ғына һөйләшеү бармаясаҡ, ә халыҡ-ара булған мөнәсәбәттәр ҙә иғтибар үҙәгендә торорға тейеш. Был тема буйынса укыусыларҙы аңлап фекер йөрөтөргә һәм һөйләй белергә өйрәтеү. Уҡылған әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе буйынса фекер алышыу, әңгәмә ойоштороу.

Грамматика:

Мөнәсәбәт һүҙҙәр. Ымлыҡтар. Уларҙың дөрөҫ яҙылышы.

**X. Йәмле йәй (3 сәғәт)**

Йәй миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Уҡыусыларҙың һүҙ байлығын арттырыу, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү. Тәбиғәтте күҙәтеү, алған тәьҫораттар буйынса фекер алышыу. Был айҙарҙа уҙғарылған Милли байрамдар менән таныштырыу, улар тураһында белгәндәрен һөйләү. Балаларҙың йәйге ялы, хеҙмәте, ололарға ярҙамы тураһында әҫәрҙәр укыу һәм әңгәмәләр үткәреү.

Грамматика:

7-се класта үткәндәрҙе ҡабатлау, дөйөмләштереү.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе:**
**8 класс**

**Алтын көҙ етте (7сәғәт).**

Был тема буйынса 5-6 класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау, һүҙлек байлығын арттырыу. Тема буйынса эҙмә-эҙлекле һөйләмдәр төҙөтөү, ҡыҫҡа ғына хикәйә төҙөргә өйрәтеү. Текст өҫтөндә эшләү,план төҙөү, план буйынса һөйләү. Мәктәп, класс торошо һ.б. хаһында әңгәмәләр ойоштороу. Белем, китап тураһында мәҡәлдәр ҡойоу. 5-6 класта үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү.

**Көҙгө эштәр һәм көҙгө күренештәр ( 10 сәғәт)**

Көҙгө үҙгәрештәрҙе бергәләп күҙәтеү, кешеләрҙең көҙгө хеҙмәтен күҙәтеү. Темаға ҡағылышлы текстар укыу. Муллыҡ, хеҙмәт тураһында мәҡәл, әйтемдәр менән танышыу. Һынамыштар укыу. Синтаксис. Маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре. Логик баҫым. Исем менән ҡылымды ҡабатлау.

**Өфө - Башҡортостандың баш ҡалаһы ( 8 сәғәт )**

Өфө - Башҡортостандың баш ҡалаһы. Өфө ҡалаһы, уның үткәне, бөгөнгөһө тураһында әңгәмә үткәреү. Уның иҫтәлекле урындары тураһында һөйләшеү, һүрәттәр ҡарау. Һөйләм телмәрен үҫтереү. Рефераттар яҙҙырыу һәм уны класс алдында ҡыҫҡаса һөйләтеү кеүек эштәр ҡулланырға мөмкин. Башҡорт ҡылымдарының төҙөлөшө. Барлыҡ төшөнсәһе һәм уның бирелеше.

**Хеҙмәт төбө - хөрмәт ( 7сәғәт )**

Кеше тормошонда хеҙмәттең роле, тигән темаға әңгәмә ҡороу. Данлыҡлы хеҙмәт ветерандары менән осрашыу ойоштороу. Уҡыусыларға ниндәй һөнәр оҡшауы тураһында һөйләтеү, яңы мәғлүмәттәр биреү. Һөнәрҙәр тураһында шиғырҙар, хикәйәләр укыу. Хеҙмәт , һөнәрҙәр тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү. Ябай һөйләм. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә менән хәбәрҙең ярашыуы. Юҡлыҡ, булмағанлыҡ төшөнсәләре.

**Ҡыш дауам итә ( 9 сәғәт )**

Ҡыш миҙгеле тураһында белгәндәрҙе системалаштырыу, һүҙлек байлығын арттырыу кеүек эштәр ентекле алып барыла. Ҡыш тураһында текстар, шиғырҙар, мәҡәлдәр, һынамыштар укыу яңы йылға бағышланған йырҙар, мәкәл һәм әйтемдәр. Яңы йыл менән ҡотлау

открыткаһы яҙырға өйрәнеү. Уҡытыусы һайлаған текст буйынса изложение яҙыу. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ.

**Салауат Юлаев – халҡыбыҙҙың милли батыры ( 6 сәғәт)**

С.Юлаевтың биографияһы, ижады менән танышыу. Уның шиғырҙарын ятлау, шиғырҙарының һаҡланыу тарихы тураһында әңгәмә ойоштороу. С.Юлаевтың тормошо, батырлығы, ижады тураһында уҡыусыларҙан төрлө ижади эштәр эшләтеү. ( һүрәттәр төшөрөү, инша яҙыу, стенгәзит сығарыу)һ.б. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре тураһында төшөнсә. Аныҡлаусы.

**Йәмле яҙ, һағындыҡ һине! ( 5 сәғәт )**

Яҙ миҙгеле тураһында белемдәрҙе системалаштырыу. Яҙғы байрамдар- 1 Май һәм Еңеү байрамы тураһында һөйләшеү. Яҙғы тәбиғәт күренештәре, ҡоштарҙы ҡаршылау, баҡса эштәре тураһында әңгәмәләр үткәреү. Тултырыусы.

**Беҙ йондоҙҙар булып ҡайтырбыҙ ( 6 сәғәт )**

Башҡорт халҡының Бөйөк Ватан һуғышындағы ҡаһарманлығы. Ветерандарға, батырҙарға ҡарата ихтирам, ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү. Данлыҡлы кешеләр менәнкисәләр, осрашыуҙар ойоштороу. Хәл. Һүҙлек менән эш күнек мәләре үткәреү.

**Ай Уралым, Уралым...( 9 сәғәт )**

Башҡортостан, уның үткәне, бөгөнгөһө хаҡында әңгәмә үткәреү. Республикабыҙҙыңкүренеклеурындарыменәнтаныштырыу. Йәйгетәбиғәттекүҙәтеү, ололарҙыңһәмбалаларҙыңйәйгеэштәретураһындадиалогһәммонологтартөҙөү. 8- се класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе:**
**9 класс**

**Һаумы, мәктәп! (6 сәғәт)**

Эш төрҙәре «Көҙ» темаһы менән берлектә алып барыла. «Көҙ» һәм «Мәктәп» темаһына шиғырҙар, әҫәрҙәр уҡыу; мәҡәл, әйтемдәр, йомаҡтар, һынамыштарҙы иҫкә төшөрөү.

Алдағы кластарҙа үтелгәндәрҙе системалаштырыу, яңы мәғлүмәт менән таныштырыу. Һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү өҫтөндә эш дауам итә.

**Ергә мәрхәмәт – илгә бәрәкәт ( 9 сәғәт).**

Тыуған Республикаға ҡарата мөхәббәт, ғорурлыҡ тойғоһо, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләргә. Улар тураһында һөйләргә, яҙырға өйрәтеү. Башҡортостандың ер аҫты, ер өҫтө байлыҡтары тураһында әңгәмәләр үткәреү, экскурсиялар ойоштороу.

**Атамалар ни һөйләй? (7сәғәт).**

Кеше тормошонда атамаларҙың да (кеше исеме, фамилияһы, атаһының исеме; ауыл, ҡала, тау, йылға һ.б.) роле ҙур. Унһыҙ тормошто күҙ алдынала килтереп булмай. Атамалар бик күп. Тел ғилемендә уларҙы өйрәнеүсе фән бар. Ул – ономистика. Онамистика фәне үҙе бер нисә тармаҡтан тора: антропонимика, этнонимика, милли, халыҡ, ҡәбилә исемдәрен, зоонимика ҡош-ҡорт, хайуан ҡушаматтарын, космонимика өйрәнеүсе фән.

Был теманы үтеү уҡыусының бала саҡтан уҡ үҙҙәре йәшәгән ауыл, ҡала, уларҙың янындағы атамаларҙың мәғәнәләрен белергә теләгән ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндерә, тыуған төйәк менән ғорурланырға мөмкинлек бирә. Сөнки атамаларҙа ил тарихы, ер һәм ошо ерҙә йәшәгән халыҡтың тел үҙенсәлектәре, халыҡ тормошо, ғөрөф-ғәҙәте, йолалары һ.б. сағыла.

**Беҙ ҡышты ла яратабыҙ. (9 сәғәт).**

Бәйләнешле телмәрҙең яҙма һәм телдән формаларына берҙәй әһәмиәт бирелә. Ҡыш миҙгеле, уның үҙенсәлектәре тураһында һөйләү күҙ уңында тотола.

**Башҡорт театры. (4 сәғәт).**

Башҡортостанда театр сәнғәте. Республикалағы театрҙар һәм уларҙың эшмәкәрлеге хаҡында дөйөм мәғлүмәт биреү. М.Ғафури исемендәге Башҡорт Академия драма театрының барлыҡҡа килеүе тарихы (халыҡ артистары З.Бикбулатова, А.Мөбәрәков, Г.Мөбәрәкова). Театрҙың күренекле артистарының тормошо һәм ижады менән таныштырыу, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү.

Театрҙың үткәне һәм киләсәге буйынса фекер алышыу ойоштороу.

**Башҡорт халыҡ ижады (8 сәғәт).**

Халыҡ ижады тураһында дөйөм төшөнсә. Фольклорҙың коллектив ижад булыуы. Фольклор һәм яҙма әҙәбиәттең айырмаһын билдәләү, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү.

**Башҡорт аты (8 сәғәт).**

Уҡыусылырҙы башҡорт атының килеп сығыуы, тарихи үткәне менән таныштырыу. Аттарҙың кеше тормошондағы мөһим ролен билдәләү. Йәш үһенсәлектәре буйынса бүленеүен билдәләү, уҡыусылырҙан дөрөҫ итеп әйттереү. Аттарға ҡарата ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, улар тураһында күберәк белеү теләге тыуҙырыу.

**Башҡорт халыҡ милли аштары ( 7 сәғәт).**

Башҡорт халҡының милли аштары менән таныштырыу. Уларҙы әҙерләү үҙенсәлектәрен билдәләү. Башҡорт милли аштары тураһында текстар менән таныштырыу.

Уҡыусылырҙың һөйләү, яҙыу телмәрен үҫтереү өҫтөндә ентеклке эш дауам итә

**Күңелле яҙ килә. (10 сәғәт).**

Башҡортостандағы яҙғы тәбиғәт күренештәре. Ҡала һәм ауылда яҙғы эштәр: ҡоштар, хайуандар һәм үҫемлектәр тормошо, яҙғы байрамдар тураһында әңгәмәләр үткәреү. Тәбиғәткә экскурсиялар ойоштороу. Дарыу үләндәренән гербарийҙар төҙөү, Еңеү көнөн билдәләү. Һуғыш ветерандары менән осрашыу, иҫтәлектәр яҙып алыу буйынса эш дауам итә.

**3. Тематическое планирование с указанием количества часов, отводимых на освоение каждой темы**

| Раздел(ч) | Класс(ч.) | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | 5кл | 6 кл | 7кл | 8кл | 9 кл |
| Һаумы, мәктәп! | 4 | 5 | 3 | 4 | 6 |
| Үҙем тураһында | 5 | | | | |
| Йыл миҙгелдәре | 4 | | | | |
| Башҡортостанды беләһеңме? | 4 | 8 | 4 | | |
| Кеше. Тән ағзалары.шәхси гигиена. | 2 | | | | |
| Яңы йыл менән! | 2 | | | | |
| Аҙыҡ-түлек.Кейем-һалым. Өй . Магазин. | 2 | | | | |
| 8 март – Ҡатын-ҡыҙҙар көнө. | 3 | | | | |
| Яҙ етте. | 3 | 6 | | 3 | 10 |
| Яҙғы эштәр | 2 | | | | |
| Йәйҙе ҡаршылайбыҙ | 3 | 4 | 3 | | |
| Дуҫлыҡкәҙерен бел | | 3 | | | |
| Ҡыш дауам итә | | 8 | | 4 | |
| Ауыл тормошо | | | 4 | | |
| Спорт. Спорт кәрәк-яраҡтары | | | 5 | | |
| Мин һәм беҙҙең ғаилә | | | 5 | | |
| Сәнғәт оҫталары | | | 3 | | |
| Исемең матур, кемдәр ҡушҡан? Исемдәрҙә - ил тарихы | | | 2 | | |
| Борон-борон заманда... | | | 2 | | |
| Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ | | | 3 | | |
| Күҙгө эштәр һәм күҙгө күренештәр | | | | 5 | |
| Өфө - Башҡортостандың баш ҡалаһы | | | | 4 | |
| Хеҙмәт төбө - хөрмәт | | | | 3 | |
| Беҙ йондоҙҙар булып ҡайтырбыҙ | | | | 3 | |
| Ай Уралым, Уралым.. | | | | 5 | |
| Ергә мәрхәмәт-илгә бәрәкәт | | | | | 9 |
| Атамалар ни һөйләй? | | | | | 7 |
| Беҙ ҡышты ла яратабыҙ | | | | | 9 |
| Башҡорт театры | | | | | 4 |
| Башҡорт халыҡ ижады | | | | | 8 |
| Башҡорт аты | | | | | 8 |
| Башҡорт  халыҡ милли аштары | | | | | 7 |

5 – 9-сы кластар өсөн башҡорт теле буйынса
эш программаһына ҡ у ш ы м т а

**Календарь-тематик планлаштырыу, 5-се класс, 2023/2024 укыу йылы**

| № | Темалар | Дата | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|
| | | план | факт | |
| 1 | Белем көнө.Башҡорт теленең өн һәм хәрефтәре. | 6.09 | | |
| 2 | С. Әлибаев. Яҡшы. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. | 13.09 | | |
| 3 | Р.Солтангәрәев Шағир.. Исемдәрҙең күплек ялғауы. | 20.09 | | Экскурсия |
| 4 | **Диктант.** | 27.09 | | |
| 5 | Хаталар өҫтөндә эш. Үҙем тураһында. | 4.10 | | |
| 6 | Исемдең килеш менән үҙгәреше.Үҙем тураһында. | 18.10 | | |
| 7 | Исемдең килеш менән үҙгәреше. Юлда һаҡ бул! | 25.10 | | |
| 8 | Алтын көҙ. Һүҙлек менән эш. | 8.11 | | |
| 9 | Беҙҙең ғаилә. Үтелгәнде ҡабатлау. | 15.11 | | |
| 10 | Башҡортостан йылғалары. Яңғыҙлыҡ, уртаҡлыҡ исем. | 22.11 | | |
| 11 | Ҡылым. Минең көн режимым. | 29.11 | | |
| 12 | Й Солтанов. Башҡортостан флагы. Зат алмаштары. | 6.12 | | |
| 13 | **Контроль диктант.**Алтын көҙ | 13.12 | | |
| 14 | Хаталар өҫтөндә эш.Тартынҡыларҙың сиратлашыуы. | 20.12 | | |
| 15 | Йыл миҙгелдәре. Күрһәтеү алмаштары. | 27.12 | | |
| 16 | Л.Толстой. Бабай менән һыу инәһе | 17.01 | | |
| 17 | **Инша.Минең яраткан миҙгелем**.. | 24.01 | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 18 | Хаталар өҫтөндә эш. Ҡушма исемдәр. | 31.01 | | |
| 19 | Республиканың тыуған көнө. Г.Ситдиҡова. Өфө ҡалаһы. Ҡушма һандар. | 7.02 | | |
| 20 | Ф.Ғөбәйҙуллина. Башҡортостан флагы. | 14.02 | | |
| 21 | С. Юлаев. Уралым. Яңғыҙлыҡ, уртаҡлыҡ исемдәр. | 21.02 | | |
| 22 | И.Ғүмәрова. Уңған ҡыҙ. | 28.02 | | |
| 23 | Шәхси гигиена. | 7.03 | | |
| 24 | Ф. Иҫәнғолов.Алдаҡсы йондоҙҙарИсемдең күплек ялғауы. | 14.03 | | |
| 25 | М.Ғәли. Беҙҙең елка. Үтелгәнде ҡабатлау. | 21.03 | | |
| 26 | Г.Ғәлиева. Икмәк. Исемдең күплек ялғауы. | 4.04 | | |
| 27 | Ә. Ихсан. Әсә рәхмәте. | 11.04 | | |
| 28 | **Изложение.** | 18.04 | | |
| 29 | Ә. Ихсан. Яҙ. Омонимдар. | 25.04 | | |
| 30 | К.Ушинский. Баҡсасы һәм уның улдары. | 2.05 | | |
| 31 | **Р.Нурмөхәмәтов. “Эштән һуң” картинаһы.** | 16.05 | | |
| 32 | Тәбиғәтте күҙәтеү. | 23.05 | | Экскурсия. |
| 33 | Йомғаҡлау дәресе. | 30.05 | | |

5 - 9-сы кластар өсөн башҡорт теле буйынса
эш программаһына ҡ у ш ы м т а

**Календарь-тематик планлаштырыу, 6-сы класс, 2023/2024уҡыу йылы**

| № | Темалар | Дата | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|
| | | план | факт | |
| 1. | Башҡорт теленең һүҙлек составы. Намыҫлы бул. | 7.09 | | |
| 2. | Синоним. Антоним. Омоним. Бал ҡорто. | 14.09 | | |
| 3. | Текст. Баҫым. Көҙ күренештәре. | 21.09 | | Экскурсия |
| 4. | **Диктант.** | 28.09 | | |
| 5. | Ф.Мөхәмәтйәнов. Кешем – ил күрке. Ҡылым. | 5.10 | | |
| 6. | Р.Бикбаев. Салауат батыр һәйкәле. | 12.10 | | |
| 7. | Г.Юнысова. Башҡортостан – дуҫлыҡ иле. | 19.10 | | |
| 8. | С. Юлаев. Тыуған илем. | 26.10 | | |
| 9. | Ф.Туғыҙбаева. Кем унған? | 9.11 | | |
| 10. | Тыуған яғығыҙҙы яратығыҙ, өйрәнегеҙ! | 16.11 | | |
| 11. | В.Сухомлинский. Потому что я – человек. | 23.11 | | |
| 12. | **Изложение.** Тейен менән бүре. | 30.11 | | |
| 13. | Хаталар өҫтөндә эш. Ҡылым һөйкәлештәрен ҡабатлау. | 7.12 | | |
| 14. | Ҡылым төркөмсәләре. Дуҫлыҡ өсөн шул етәме? | 14.12 | | |
| 15. | Исем ҡылым. Дуҫлыҡ ауыр саҡта һынала. | 21.12 | | |
| 16. | Уртаҡ ҡылым. Һеҙҙе ҡунаҡҡа саҡырҙылар. | 28.12 | | |
| 17. | Ҡылым төркөмсәләрен ҡабатлау. Дуҫлыҡ монументы. | 18.01 | | |
| 18. | **Инша.** О.Богаевская. “Ҡунаҡтар” картинаһы. | 25.01 | | |
| 19. | Рәүеш төркөмсәләре. Ҡышҡы тәбиғәт. | 1.02 | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 20. | Рәүеш төркөмсәләре. Ҡоштар донъяһы. | 8.02 | | |
| 21. | Рәүеш төркөмсәләре. Ағастарҙың файҙаһы. | 15.02 | | |
| 22. | **Изложение.** Өйрәк ватылды. | 22.02 | | |
| 23. | Хаталар өҫтөндә эш. Г.Яҡупова. Уртаҡ ҡыш. | 1.03 | | |
| 24. | Рәүештең сифат менән оҡшаш һәм айырмалы яҡтары.. | 15.03 | | |
| 25. | З.Рәхмәтуллина. Телефондан һөйләшә беләһеңме? | 22.03 | | |
| 26. | Ябай һәм ҡушма һан. Р.Янбулатова. Ҡоштар ҡайта. | 5.04 | | |
| 27. | Һан төркөмсәләре. К.Кулиев. Береги все живое. | 12.04 | | |
| 28. | **Тәржемә өсөн диктант**. Красная книга. | 19.04 | | |
| 29. | Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы. Күҙҙәрендә, әсәй, - донъя… | 26.04 | | |
| 30. | Үлсәү һүҙҙәре. Ғ.Хөсәйенов. Ете- хикмәтле һан | 10.05 | | |
| 31. | Файҙалы үтһен ялың. | 17.05 | | |
| 32. | Тәбиғәтте күҙәтеү | 24.05 | | Экскурсия |
| 33. | Йомғаҡлау дәресе. | 31.05 | | |

5 - 9-сы кластар өсөн башҡорт теле буйынса
эш программаһына ҡ у ш ы м т а

**Календарь-тематик планлаштырыу, 7-се класс, 2023/2024 укыу йылы**

| № | Темалар | Дата | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|
| | | план | факт | |
| 1 | М. Кәрим ”Уҡытыусыма.” Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 8.09 | | |
| 2 | Т.Дәүләтбирҙина. Миҙгелдәр. Ҡылым. Ҡабатлау. | 15.09 | | |
| 3 | **Диктант.** Тәбиғәтте һаҡлағыҙ. | 22.09 | | |
| 4 | Текст. Ауыл тормошо. | 29.09 | | Экскурсия |
| 5 | Текстың төп фекере. Кто прав? (по Мурзину). | 6.10 | | |
| 6 | Н.Мусин.”Тәбиғәтте һаҡлау. Тексҡа анализ. | 13.10 | | |
| 7 | М.Кәрим. “Башҡортостан”. Тексҡа анализ. | 20.10 | | |
| 8 | Башҡорт халыҡ йыры “Урал”. | 27.10 | | |
| 9 | **Диктант.** В поле ничего нет. | 10.11 | | |
| 10 | Хаталар өҫтөндә эш. Арҡайым. | 17.11 | | |
| 11 | Л.Толстой башҡорт далаһында. | 24.11 | | |
| 12 | З.Исмәғилев. Тәржемә эше. | 1.12 | | |
| 13 | Спорт. Беҙҙең ғаилә – ярышта. | 8.12 | | |
| 14 | Башҡортостан ҡалаларында спорт. | 15.12 | | |
| 15 | Башҡортостан чемпиондар иле. | 22.12 | | |
| 16 | К.Шафиҡова.” Әсәй күҙҙәре.”Ҡылым ҡабатлау. | 29.12 | | |
| 17 | **Инша.** Т.Яблонская. “Иртә” картинаһы. | 19.01 | | |
| 18 | В.Меос картинаһы.”Ярҙамсы”. Телмәр үҫтереү. | 26.01 | | |
| 19 | Ш.Бикҡолов. Атай менән өләсәй. | 2.02 | | |
| 20 | Ф.Рәхимғолова.” Беҙҙең әсәй”. Теркәүес. | 9.02 | | |
| 21 | Х.Әхмәтов. “Тыуған ауылым.”Эйәртеү | 16.02 | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | теркәүестәре. | | | |
| 22 | Что такое Родина? Эйәртеү теркәүестәре. | 2.03 | | |
| 23 | Ҡумыҙсы Р.Заһретдинов. Һүҙбәйләнеш. | 9.03 | | |
| 24 | Мәшһүр бейеүсе Рәшиҙә Туйсина. Һүҙбәйләнеш. | 16.03 | | |
| 25 | Исемдәрҙә – ил тарихы. Бәйләүестәр. | 23.03 | | |
| 26 | Бхә.”Ҡан-ҡәрҙәш”.Киҫәксәләр. | 6.04 | | |
| 27 | Мать первого космонавта. **Тәржемә эше.** | 13.04 | | |
| 28 | Ф. Туғыҙбаева. “Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?” | 20.04 | | |
| 29 | Ш.Бикҡол.”Тыныслыҡ кәрәк. | 27.04 | | |
| 30 | К.Кинйәбулатова. “Дуҫтарым күп”.Мөнәсәбәт һүҙҙәр. | 4.05 | | |
| 31 | С.Әлибаев. ”Дуҫтарым”. Ымлыҡтар. | 11.05 | | |
| 32 | Тәбиғәттә төҫтәр бирелеше | 18.05 | | Экскурсия |
| 33 | Йомғаҡлау дәресе. | 25.05 | | |

5 - 9-сы кластар өсөн башҡорт теле буйынса
эш программаһына ҡ у ш ы м т а

Календарь- тематик план (8-се класс)

| № | Тема | планлашты рған | үткәргән | Иҫкә рмә |
|---|---|---|---|---|
| *Алтын көҙ етте.* | | | | |
| 1 | М. Сиражи “Йәндәрҙе балҡытыусы”. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 5.09 | | |
| 2 | Көҙ айҙары. Башҡорт ере мөғжизәләре. | 12.09 | | |
| 3 | с. Муллабаев. Көҙгө урман. Синтаксис. | 19.09 | | |
| 4 | Һынамыштар. Маҡсат буйынса һөйләм төрҙәре. | 26.09 | | |
| 5 | Р. Шаммасов.Тыуған яғым. | 3.10 | | |
| 6 | В. Э. Меос. “Шығайҙағы ҡайындар” картинаһы. ”Беҙҙең яҡта көҙ” инша | 10.10 | | |
| 7 | Көҙ ҡышты билдәләй. Һынамыштар. Контроль диктант | 17.10 | | |
| 8 | Һүҙлек менән эш. Боронғо Өфө. | 24.10 | | |
| *Өфө – Башкортостандың баш ҡалаһы* | | | | |
| 9 | Хаталар өҫтөндә эш. Өфө - беҙҙең баш ҡалабыҙ. | 7.11 | | |
| 10 | Н. Нәжми.Тыуған ҡалама йыр. Боронғо Өфө. | 14.11 | | |
| 11 | Аттарҙа сабып ҡына. Географик атамалар. | 21.11 | | |
| 12 | Ҡ. Даян. Матур Өфө ҡалаһы. Өфө урамдары. | 28.11 | | |
| *Хеҙмәт төбө – хөрмәт* | | | | |
| 13 | К. Кинйәбулатова. Ватаным тауыштары. Ябай һөйләм һәм уның төрҙәре. | 5.12 | | |
| 14 | З. Биишева. Йәшәү-хеҙмәт. Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр. | 12.12 | | |
| 15 | Контроль диктант “Өфөм- баш ҡалам” | 19.12 | | |
| 16 | Хаталар өҫтөндә эш. Һөйләмдең баш | 26.12 | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| | киҫәктәре. | | | |
| 17 | Р. Шәкүров. Эшһөйәрҙәр иле. Юҡлыҡ төшөнсәһе һәм уның телдә бирелеше. | 9.01 | | |
| 18 | М. Ғафури. Гөлдәр баҡсаһында. | 16.01 | | |
| 19 | Д. Темплон. Тормошҡа ашмаҫтай эш юҡ. Һөнәрҙәр. | 23.01 | | |
| 20 | Т. Мөхәмәтҡолов. Ҡыйыулыҡ. | 30.01 | | |
| *Ап-ак ҡыш етте.* | | | | |
| 21 | С. Хажиев. Ноябрь. В.Э. Меос. “Ауылда ҡыш “ картинаһы | 6.02 | | |
| 22 | Ә. Вахитова. Ҡарҙар яуа. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ. | 13.02 | | |
| 23 | Хаталар өҫтөндә эш. Н. Нәжми “Ҡыш” С.Әлибай. “Ҡышҡы урман”. | 20.02 | | |
| 24 | Е.Кучеров. “Бураны ла, тамсыһы ла булыр”. Ҡыш тураһында мәҡәлдәр һәм әйтемдәр | 27.02 | | |
| *Йәмле яҙ, һағындыҡ һине!* | | | | |
| 25 | Контроль диктант “Ҡош юлы” | 5.03 | | |
| 26 | Хаталар өҫтөндә эш. Г.Яҡупова. “Өмөтлө яҙ”.Аныҡлаусы. | 12.03 | | |
| 27 | 8 март-Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө. К. Кинйәбулатова. Йырлай-йырлай еңеү яуланыҡ. | 19.03 | | |
| 28 | Р.Ниғмәти. “Ватан”. Тултырыусы. | 2.04 | | |
| Беҙ йондоҙҙар булып ҡайтырбыҙ | | | | |
| 29 | С. Әлибай. Сәскәле ай. Хәл | 9.04 | | |
| 30 | М.Харис.” Хат”. Үлемһеҙ батырлыҡ. Хәлдәрҙең һөйләмдәге роле. | 16.04 | | |
| 31 | Салауат Юлаев. Тыуған илем. | 23.04 | | |
| 32 | Палдискиҙа Салауат музейы. “Салауаттан һорау алыу”картинаһы | 30.04 | | |
| *Ай Уралым, Уралым…* | | | | |
| 33 | Контроль диктант “Ай Уралым, Уралым” | 7.05 | | |
| 34 | Хаталар өҫтөндә эш. Р.Бикбаев “Уралыма” Р.Ниғмәтуллин. “Башҡортостан.”. Һөйләмдең баш киҫәктәре. | 14.05 | | |
| 35 | З.Биишева. “Йәшәү-хеҙмәт”. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Йомғаҡлау. | 21.05 | | |

5 - 9-сы кластар өсөн башҡорт теле буйынса
эш программаһына ҡ у ш ы м т а

**Календарь-тематик планлаштырыу, 9-сы класс, 2023/2024уҡыу йылы**

| **№** | **Темалар** | **Дата** | | **Иҫкәрмә** |
|---|---|---|---|---|
| | | **план** | **факт** | |
| 1 | А.Игебаев“Бик тә кәрәк тыныслыҡ”Үтелгәндәрҙеҡабатлау | 5.09 | | |
| 2 | М.Кәрим.Оҙон оҙаҡ бала саҡ. Һүҙбәйләнеш. | 12.09 | | |
| 3 | М.Аҡмулла. Күҙ. Антонимдар. | 19.09 | | Экскурсия |
| 4 | Н. Мусиндың ижады. Хәлдәр. | 26.09 | | |
| 5 | Р.Ғарипов. Кеше. Урын хәле. | 3.10 | | |
| 6 | Т. Ғәниәева“Оло Ялан” Исем -ҙең килеш менән үҙгәреше | 10.10 | | |
| 7 | Башҡортостан йылғалары.Күләм дәрәжә хәле. | 17.10 | | |
| 8 | Ҡаруанһарай. Шарт хәле. | 24.10 | | |
| 9 | **Тәржемә өсөн диктант.** Башҡортостан. | 7.11 | | |
| 10 | Ҡ.Аралбай. Янғантауға мәҙхия. | 14.11 | | |
| 11 | Д.Мырҙаҡаева. Өфө һуҫары. | 21.11 | | |
| 12 | Ш.Бабич. Ҡышҡы юлда.Йәнләндереү. | 28.11 | | |
| 13 | **Тәржемә эше.** Ҡышҡы көн. | 5.12 | | |
| 14 | Ҡышҡы байрамдар. Ҡышҡы нардуған. | 12.12 | | |
| 15 | **Инша.** Беҙҙә ҡышлаусы ҡоштар. | 19.12 | | |
| 16 | Өфө театрҙары. Өҫтәлмәлек. | 26.12 | | |
| 17 | А.Мөбәрәков. Сағыштырыу. | 9.01 | | |
| 18 | **Изложение.** Два сына. | 16.01 | | |
| 19 | Башҡорт халыҡ ижады. Һөйләм. | 23.01 | | |
| 20 | Урал батыр” эпосы. Ябай һөйләм төрҙәре. | 30.01 | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 21 | Урал батыр” эпосы.Бер составлы һөйләмдәр. | 6.02 | | |
| 22 | Башҡорт халыҡ ижадында һандар. | 13.02 | | |
| 23 | Н.Иҙелбай. “Ел, ерәнем!” | 20.02 | | |
| 24 | Башҡорт аты ниндәй була? Тиң киҫәкле һөйләмдәр. | 27.02 | | |
| 25 | **Контроль диктант**. Аттарҙа сабып ҡына. | 5.03 | | |
| 26 | С.Агиш. Турыҡай. Тиң киҫәктәр, тыныш билдәләре. | 12.03 | | |
| 27 | Ф.Кащеев картинаһы.Ҡушма һөйләмдәр. | 19.03 | | |
| 28 | Г. Юнысова. Әсәйҙәр бит яҙҙар кеүек. | 2.04 | | |
| 29 | Билдәһеҙ һалдат ҡәбере.Эйәртеүле һөйләмдәр. | 9.04 | | |
| 30 | Ғ.Хөсәйенов. Ғәзиздәрҙән ғәзиз тупраҡ. | 16.04 | | |
| 31 | Кластан тыш уҡыу | 23.04 | | |
| 32 | Тәбиғәтте күҙәтеү. | 30.04 | | Экскурсия |
| 33 | Йомғаҡлау. | 7.05 | | |
| 34,35 | Үткәндәрҙе ҡабатлау. | 14.05<br>21.05 | | |

Уҡыу-уҡытыу ҡулланмалар исемлеге


1. Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1994.
2. Башҡорт теле таблицаларҙа, схемаларҙа һәм ҡағиҙәләрҙә. Әүбәкирова З.Ф.– Өфө, 2006.
3. Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө: Китап, 2009.
4. Давлетшина М. С. Методика преподавания башкирского языка(1часть) - Уфа, 2010г.
5. Давлетшина М. С., Габитова З.М. Методика преподавания башкирского языка (2 часть) - Уфа,2011г.
6. Нафикова З.Г., Валеева В.В. Наглядно-дидактическое пособие по усвоению башкирского языка (на баш.яз.) Эдвис, 2008 г.
7. Рус телле мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу.Методик күрһәтмә.Ғәбитова З.М.,Баһаутдинова М.И., Йәғәфәрова Г.Н.,Йәғәфәров Р.Ғ. БМҮИ нәшриәте. Өфө, 2008.

8. Әүбәкирова З.Ф., Әүбәкирова Х.Е., Дилмөхәмәтов М.И. Мин башҡортса уҡыйым – Өфө: Китап, 2007.
9. Тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр, һанамыштар. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтколова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.
10. «Аманат» журналы.
11. Ял минуттары өсөн күнегеүҙәр. Методик ҡулланма. Төҙөүселәр: Иҫәнғолова Ә.Ф., Дәүләтколова Г.Ш. – Өфө: Эшлекле династия, 2008.


Методик ҡулланмалар

1. Аҙнабаева Ф.Г., Йылҡыбаева Г.Р., Нарынбаева А.З. һ.б. Гөлбостан: Балалар баҡсаһында телмәр үҫтереү өсөн методик ҡулланма. – Өфө: Китап, 2008.
2. Азнабаева Ф.Г.. Фаизова М.И.. Русский язык в национальном дошкольном образовательном учреждении. – Уфа:Китап,2010.
3. Аслаев Т.Х., Атнағолова С.В. Башланғыс мәктәптә телмәр мәҙәниәтен үҫтереү дәрестәре.- Өфө:Китап,2009.
4. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы. Дәүләтшина М.С. // Өфө, Китап, 2010.
5. Башҡортса – русса мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлеге . // И.М.Ғарипов. Өфө, Китап, 1994
6. Башҡорт телен уҡытыуҙа актив формалар һәм алымдар. Толомбаев Х.А., Асанбаева Р.Р., Өфө, БМҮИ, 2006
7. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән традицион булмаған дәрестәр. // Баһауетдинова М.И, Йәғәфәрова Ғ.Н., Өфө, Информреклама, 2003.
8. Беҙ башҡортса уҡыйбыҙ.(1-2) .// Толомбаев Х.А. Дәүләтшина М.С. Өфө, Китап, 2002.
9. Габитова З.М. Методические рекомендации и организация работы по обучению башкирскому языку в русской школе.- Уфа: Китап, 2006.
10. Ғәбитова З.М., Баһауетдинова М.И. Рус телле мәктәптәрҙә башҡорт теле уҡытыу. Методик күрһәтмә. – Өфө: Китап, 2008
11. Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. Башҡорт телен дәүләт теле итеп өйрәнеүселәр өсөн.- Өфө: Китап, 2009.
12. Изучаем башкирский язык. Интенсивный курс обучения. .// Усманова М.Г. Өфө, Китап, 2011.
13. Йәш уҡытыусыға ярҙамға // Абуталипова Р.Ә. Өфө, Китап, 2003.
14. Уҡытыусының тел буйыса уҡыу- уҡытыу методик комплекты (комплексы)
15. Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороу буйынса методик кәңәштәр // Ғәбитова З.М., Толомбаев Х.А. Өфө, Китап, 2006.

Интернет-ресурстар

1. Сайт, посвященный изучению башкирского языка - http://tel.bashqort.com/home
2. Электронный журнал учителей башкирского языка и литературы - http://ostaz.ru/
3. Башкирский языковой портал - http://bashkort-tele.narod.ru/
4. Башкирский форум - http://www.bashforum.net/ http://bashkort-tele.livejournal.com/